*Муллағәлина Миләүшә Хәлил ҡыҙы*

**Тема:** « Икмәк тәме » Р.Сәғәҙиев

**Маҡсат:** хикәйәнең йөкмәткеһе менән таныштырыу,уны үҙләштереү; телмәр һәләтлелектәрен үҫтереү; игенсенең хеҙмәтенә ихтирам  уятыу; йәшәү сығанағы – икмәккә хөрмәт, һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү;
Йыһазлау: интеректив таҡта, тренажер таблицалары, карточкалар

## Дәрес барышы

I.Ойоштороу

II. Йомаҡ сисеү






- Бөгөн дәрестә нимә тураһында һөйләшәсәкбеҙ?

III. Инеш әңгәмә






Икмәк булһа, табындар ҙа мул була. Тамаҡ туҡ, күңелдәр көр була. Ләкин икмәк өҫтәлгә еңел генә  килмәй, уның өсөн күп хеҙмәт түгелә.

- Икмәк беҙҙең өҫтәлгә килеп ултырғансы ниндәй ҡатмарлы юлдар үтә икән?





- Эйе, уҡыусылар, икмәк – иң ҡәҙерле ризыҡ (аҙыҡ).Был ризыҡты булдырыу өсөн күпме кеше көс түгә:

  - игенселәр сәсеүгә орлоҡ әҙерләй
  - яҙ еткәс ерҙе һөрәләр, тырматалар
  - орлоҡ сәсәләр, утайҙар, ерҙе йомшарталар, зарарлы бөжәктәрҙе ағыулайҙар
  - ашлыҡ өлгөрә
  - комбайн уны ура
  - йыйылған игенде элеваторға оҙаталар
  - он эшләйҙәр
  - ондан икмәк бешерәләр

- Ә хәҙер һеҙҙең һөйләгәндәрҙе нығытып үтәйек. Был слайдта төрлө һөнәр эйәләренең эшләгән эштәрен дөрөҫ итеп табып, уҡтар менән тоташтырырға кәрәк.

| | |
|---|---|
| **Игенсе** | **он һһай** |
| **Тирмәнсе** | **иген үҫтерә** |
| **Агроном** | **икмәк бешерә** |
| **Тракторсы** | **ашлама индерә** |
| **Ашнаҡсы** | **ерҙе һөрә, тырмата** |
| **Ер** | **нурҙарын һибә** |
| **ҡояш** | **һутын бирә** |
| **Ямғырҙар** | **көс бирә** |



- Эйе уҡыусылар, икмәктең беҙҙең өҫтәлгә килеп ултырыуы игенсенең хеҙмәтенән генә тормай, ә тәбиғәт тә ҙур роль уйнай.

- Иғтибар менән таҡтаға ҡарайбыҙ.Бында һеҙгә шиғыр бирелгән. Ләкин ҡайһы бер һүҙҙәрҙә автор ниндәй хәреф яҙырға кәрәклеген белмәгән. Беҙ уға ярҙам итәйек.



- Иң тәмле аҙыҡ, (х,һ)инеңсә,
ҡустым, нимә, (а,ә)йт әле? –
Тип һораны б(э,е)рҙән- бер көн
А(г,ғ)айым Сәйетғәле.

Ағайға мин : - Тәмл(э,е)нең дә
Т(ә,е)млеһе икм(э,ә)к, - тинем.
Дөрө(с,ҫ) (йа,я)уап бирҙең, - тип ул,
Арҡамдан һөйҙө мин(э,е)ң.

- Ниндәй икмәк тураһында һүҙ бара? (тәмле икмәк, икмәк тәме)

- Бөгөн уҡыясаҡ хикәйәбеҙ «Икмәк тәме» тип атала.
- Автор Рәил Сәғәҙиев был хикәйәһен ниңә шулай тип атаны икән? Һеҙ нисек уйлайһығыҙ? (хуш еҫле, яңы бешкән, йылы, кетерҙәп торған)

- Ә бына ҡайһығыҙҙың фекере авторҙың фекере менән тура килер икән? Хикәйәне уҡығандан һуң белербеҙ.

V. Текст өҫтөндә эш

- һүҙлек эше

- Ябалаҡлап – хлопьями
- ҡар тотоу – снегозадержание
- мәғәнә – смысл
- дым – влага
- яңылыҡ – новость
- яңғырай – звучит

- уҡытыусының уҡыуы

- һорауҙарға яуап биреү:
  - автор үҙенең ниндәй сағын һүрәтләүҙән башлай?(бәләкәй)
  - ниндәй миҙгел?(ҡыш)
  - тышта нимә яуған?(ҡар)
  - атаһы нимәгә шатланған? - Табып уҡығыҙ
  - ысынлап та тышта икмәк яуғанмы?

- нимә яуған?(ҡар)
- малай иптәштәре менән нимә ашап ҡараған? (берәр йомарлам ҡар)
- унан икмәк тәме килгәнме?(юҡ)
- ә һеҙҙең ҡар ашағанығыҙ бармы?
-ҡар ашарға яраймы? (ярамай, ҡар бысраҡ. Ул тик ерҙең аҙығы, ә кешенеке түгел.
-ҡар икмәк була аламы? (юҡ, була)
- ни өсөн шулай уйлайһығыҙ? (ҡар икмәкте үҫтереүсе)
- иртәгеһен малайҙың атаһы ҡайҙа барырға йыйынған? (баҫыуға)
- ул баҫыуҙа ни эшләргә йыйына?(ҡар тоторға)
- ни өсөн ҡар тотолар, ҡыш көнө ул былай ҙа күп бит? һеҙ быны нисек аңлайһығыҙ ? - Табып уҡығыҙ

(ҡарҙы баҫыуға ҡалын өйҙөрһәң, яҙын дым күп була. Дымлы ерҙә бойҙай шәп үҫә)

- Ә бына автор бәләкәй сағында быны аңламаған. Һәм һеҙ кескәй саҡтан уҡ аңлап үҫһен өсөн ошондай матур хикәйә яҙған.

- Былтыр ҡар әҙ яуҙы, ерҙә дым булманы, иген дә уңманы(не урадилась) шуға инде икмәк тә ҡиммәтләнде.

- Ә һеҙ икмәктең ҡәҙерен беләһегеҙме?

- Ә бына ҡайһы бер балалар икмәктең ҡәҙерен белмәйҙәр. Беҙҙең мәктәптә генә коридорҙа, баҫҡыста, тәҙрә төбөндә, парта аҫтарында, хатта бәҙрәфтә лә икмәк һыныҡтары ята.
Бына мин бөгөн коридорҙан йыйып алған икмәк һыныҡтары.

- Икмәк – ҙур байлыҡ. Ул кешеләргә үҫергә, тырышып уҡырға,эшләргә һәм йәшәргә көс бирә. Ололарҙың әйткәнен һәр ваҡыт иҫтә тоторға кәрәк

- Икмәктән оло булма
- Икмәк аша атлама
- Икмәктең валсығын да ергә төшөрмә.

- Хикәйә ни өсөн «Икмәк тәме» тип аталған?
- Дәрес башындағы слайдҡа кире әйләнеп ҡайтайыҡ. Баҫыуҙа эштәр яҙ көнө генә башланамы? (ҡыш көнө лә эш туҡталмай, йыл әйләнәһенә дауам итә)
- **механизаторҙар көҙөн баҫыуға ашлама сығара**
- **ерҙе туңға һөрә**
- **ҡышын ҡар тота**





- игенселәр сәсеүгә орлоҡ әҙерләй
- яҙ еткәс ерҙе тағы һөрәләр,тырматалар
- орлоҡ сәсәләр,утайҙар,ерҙе йомшарталар,зарарлы бөжәктәрҙе ағыулайҙар
- ашлыҡ өлгөрә
- комбайн уны ура
- йыйылған игенде элеваторға оҙаталар
- он эшләйҙәр
- ондан икмәк бешерәләр

- Ә хәҙер яуаптарығыҙҙы нығытып ҡуйыйыҡ

Яҙыуҙы һүрәт менән дөрөҫ итеп тоташтырығыҙ







Дымлы ерҙә бойҙай шәп үҫә

Берәр йомарлам ҡар ашап ҡараныҡ

Һалҡын ҡыш етте

ҡырҙағы ҡар тулҡындары

Баҫыуҙа ҡар тотоу

Быныһы шәп: икмәк яуа шулай, ик-мә-әк!









Ял минуты

Булаттың тыуған көнөнә
Беҙ бешерҙек аҡ ҡалас:
Бына шулай ул бейек,
Бына шулай тәбәнәк,
Бына шулай киңлеге.
Бына шулай тарлығы.
Аҡ ҡалас, аҡ ҡалас,
Теләгәнеңде алып ҡас!

Төркөмдәрҙә эш :

**1 төркөм** - **«Кар йомғағы» уйыны**

Берәр һүҙ өҫтәп һөйләмде арттыра барыу.






**2 төркөм** - **Синквейн төҙөй**




**3 төркөм** - **Кластер төҙөй**







- **Мәҡәлдәрҙең парҙарын табығыҙ һәм дәфтәрҙәрегеҙгә яҙығыҙ** (Кем яҙып бөткән, мәғәнәләрен аңлата башлай)











VI. Йомғаҡлау

Ҡәҙерле уҡыусылар, бөгөнгө дәрестә һеҙҙең күңелдәрегеҙгә изге бөртөк һалынды. Әгәр һеҙҙең күңелдәрҙә шул изге бөртөктө ҡабул итерлек ерлек булһа, ул шыта башлар, тамыр ебәрер, һабаҡ сығарыр, япраҡ ярыр, сәскә атыр һәм емештәрен бирер. Ә ул емештәрҙең исеме :

**И** – игелек,
**М** – мәрхәмәт,
**А** – аҡыл,
**Н** – намыҫ төшөнсәләрен берләштерә.
**Иманлы булығыҙ, балалар!**

Мәғәфүр Хисмәтуллин башҡарыуында **«Башҡортостан икмәге»** йырын тыңлау.




VII. Өйгә эш

- хикәйәне тасуири уҡырға өйрәнергә
- 59-сы күнегеүҙәге һүрәт буйынса, һөйләмдәр төҙөгөҙ